# Беләмен, ғәжәйеп бер көн киләсәк



*Мукаъәле Мақатаев*

Ҡаҙаҡ әҙәбиәте тарихында үҙенең шәхси һәм ижади яҙмышы менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа ике тамсы һыу һымаҡ оҡшаған бер әҙип бар. Ул — мәшһүр шағир һәм тәржемәсе Муҡағәле Маҡатаев. Был хикмәтле оҡшашлыҡты күрһәтер өсөн уларҙың тәржемәи хәлдәренә ҡыҫҡаса күҙ һалайыҡ. М.Маҡатаев 1931 йылда Ҡаҙағстандағы Алматы өлкәһенең Нарынкүл районына ҡараған Ҡараһаҙ ауылында тыуа (Рәми Ғарипов — 1932 йылда). Тәүгеһенең тыуған көнө 9 февраль, икенсеһенеке — 12 февраль. Муҡағәле Маҡатаев 1954—1962 йылдарҙа Ҡаҙағстан радиоһында диктор, уҡытыусы булып эшләй, 1962—1972 йылдарҙа “Социалистик Ҡаҙағстан”, “Ҡаҙаҡ әҙәбиәте” гәзиттәрендә, “Мәҙәниәт һәм тормош”, “Йондоҙ” журналдарында хеҙмәт итә. Рәми ағайҙың да тормошо асылда матбуғат баҫмалары менән бәйле булды. М.Маҡатаев та, Рәми Ғарипов һымаҡ, Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтында белем ала, ул да рус һәм сит ил классикаһын туған теленә тәржемә итеү менән шөғөлләнә. Үҙе иҫән саҡта уның да өс-дүрт китабы донъя күрә. 1976 йылда 45 йәшендә Алматы ҡалаһында донъянан үтә (Рәми ағай ҙа 45 йәшендә 1977 йылда вафат булды).

Муҡағәле Маҡатаевҡа ысын дан, Рәми Ғариповтыҡы кеүек, үҙе үлгәндән һуң килә — 2000 йылда уға һайланма әҫәрҙәре өсөн Ҡаҙағстандың дәүләт премияһы бирелә. Хәҙерге көндә ул шиғырҙары иң ныҡ уҡылған әҙиптәрҙән һанала. Ике шағирҙың яҙмыштары үҙҙәре был донъянан киткәс кенә айырымлана: Алматы ҡалаһында Муҡағәлегә бронза һәйкәл ҡуйылған, тыуған ерендә айырым мөһабәт музей төҙөлгән. Тик уныһы инде беҙгә түгел, ә туғандаш республиканың үҙ аллы дәүләт статусы алыуына бәйле. Мәшһүр шағирҙың тыуыуына 85, вафат булыуына 40 йыл тулыу уңайы менән журнал уҡыусыларға Муҡағәле Маҡатаевтың үҙем тәржемәләгән бер шәлкем шиғырҙарын тәҡдим итмәксемен.

Иғтибар итһәгеҙ, айырым шиғырҙарҙың автор яҙғанса версткаһын һаҡларға тырыштым, сөнки был үҙенсәлек боронғо төрки поэтик традицияларына хас күренеш: әгәр шиғыр юлдарын шулай баҫҡыслап бирһәң, уларҙы көйләп, думбрала әйтһәң, кәрәкле экспрессияға, көсөргәнешлеккә өлгәшеүе еңелерәк — ҡаҙаҡ шиғриәтенең бик мөһим бер үҙенсәлеге нәҡ шунда...

*Мәүлит ЯМАЛЕТДИН*

## Ватан хаҡында

Мин уның тәнән һөйәм, көнөн һөйәм,
Аҡкан һыуын, бейек тауын, гөлөн һөйәм.
Мин уның изгелекле телен һөйәм,
Мин уның ҡөҙрәтле өнөн һөйәм.

Һәр затын һөйәм уның, ҡыбырлаған,
Ҡолағыма: “Ватан!” — тип шыбырлаған.
Йәнем минең!
Кәүҙәмде ярып сыҡ та,
Буҙ турғайы бул уның, сырылдаған.

Ватан, ватан!
Барынан бейек икән,
Мин уны мәңгелеккә һөйөп үтәм.
Ватанды һөймәүе лә көйөк икән,
Ватанды һөйөүе лә көйөк икән.

* * *

Кәм булып яралманым мин һис кемдән,
Сит-яттарға бурысым юҡ ғөмүмән.
Бәйелемде даръя менән ярәштырып,
Тәҙрәмде сағыштырам асман менән.

Дусҡа һыйын — аралар дошманыңдан,
Бурыслымын бер халҡыма ни замандан.
Ҡалай түҙәм, арҡаһы көмөрәйгән
 Өләсәмдең күҙенә йәш һауғанда?

Ҡайғы төшһә башына бер ағаның,
Нисек кенә сыҙап мин торамын?
Йәшен һөртөп уларҙың, бергә илап,
Бергә көлөп шулар менән, йыуанамын.

Ишетеп тә илауын йәш баланың,
Нисек кенә намысҡа көс төшөрәмен?
...Үргә сөйөп, сабыйҙы йыуатмаһам,
Сабый-халҡым, һиңә мин мәсхәрәмен.

Сабый-халҡым, серҙәрем — һиңә генә,
Ялған уй, йәшерен хәл ситен миңә.
Һинең өнөң миндә, һинең моңоң,
Һинең уйың эйәләшкән зиһенемә.

## Мин таулымын

Мин таулымын!
Йәнем тауҙан яратылған,
Тауҙай ҙур йөрәкле әсә хасил ҡылған.
Ҡейектең һөтөн имеп ир еткәнмен,
Ҡеүәт алып бөркөттөң ҡанатынан.

Мин таулымын!
Йәнем тауҙан яратылған.
Түбәм күктә йәшен менән бәхәс ҡорған.
Ҡояш тәүге нурҙарын миңә сәсеп,
Миндә төнәй, һыйынып, ҡара томан.

Тау улымын,
Тау — минең дәү бишегем.
Мин уның сағылған нур-шәүләһемен.
Буй еткеһеҙ ҡая тирбәй бишегемде,
Бер ҡатлауын тағатып сәлләһенең.

Мин таулымын!
Йәнем тауҙан яратылған.
Әсәм тыуған тау тигән изге ҡәлғәм.
...Тауға менеп,
Күккә осоп китһәм икән,
Тотоп алып бөркөттөң ҡанатынан.

* * *

Ҡомдар, ҡомдар...
Тауише өйкөм ҡомдар!
Нисәмә каруанды сыуалтҡандар,
Нисәмә йылғаларҙы һыуалтҡандар,
Нисәмә быуаттарҙы оҙатҡандар!..

Сүлдәрҙә бер-береһен һөйәп үлгән,
Йорт күсһә, таянысы дөйә булған
Ҡаҙағымдың таң ҡалам ырыҫына:
Шунсама сәхрәгә эйә булған!

Самолеттан мейе төҫлө күренә далам,
Гүйә, һағым уйнаған сикһеҙ ғаләм...
Ҡайһы бер тарафында ҡултамға бар —
Каруандар эҙе менән сыймаҡланған.

## Ҡиләсәккә

Беләмен,
Ғәжәйеп бер көн киләсәк!
Сәскә атып, йәшел баҡса күкрәйәсәк.
Күрәмен: ғәжәйеп бер көн кисәмен,
Һинең менән бергә үҫәм, киләсәгем.
Мин һинең өнөң менән өндәшәмен,
Мин һинең телең менән һөйләшәмен.

Буйында бер урамдың байрам ҡорам...
Ҡиләсәгем, мин үлмәм, һин һау торһаң!
Хәҡиҡәттең алдында бөгөлмәҫ кем?
Ни юғалмаҫ, ғүмерҙән өҙөлмәҫ кем?
Һин исән бул!
Мин, бәлки, килмәм ҡабат.
Тик мин һинһеҙ күкрәй алмам — шул хәҡиҡәт!

## Тыуған илгә

Ҡояш булып тыуманым күгеңдә мин,
Ҡояшһыҙ ҙа йылымды бушлай бирәм.
Күҙ йәшеңдәй йәшереп һаҡларһыңмы —
Керпегеңдән әлегә түгелмәгән?

Ай булып тыумаһам да күктәреңдә,
Байрам булам затыма, дуҫтарыма.
Өмөтөмдөң эҙендәй һаҡларһыңмы —
Һеңеп ҡалған ташыңа, ҡомдарыңа?

Йондоҙ булып яналманым ғәрешеңдә,
Батыр тигән дан алмам яу эшендә.
Донъя имен...
Тыуған ил, онот мине,
Көрәшмәһәм, аралап намыҫыңды.

Мин балаңмын, һиндә тыуып, һиндә үҫтем,
Ҡыйыш-мыйыш уйҙар юҡ миндә бүтән.
Минең һиңә килтерер зарарым шул —
Бер ус ҡына тупрағыңды алып китәм.

* * *

Әй, тәбиғәт!
Ҡамиллыҡта берәүһең,
Күрмәгәнде күрһәтәһең, бирәһең.
Икһеҙ-сикһеҙ байлығыңды әҙһенеп,
Ас күҙләнгән заттарға ни тиәһең?!

Ана, Айың, ана, Ҡояш, бына, Ер,
Тағы нимә етмәй һеҙгә, кешеләр?
Тәбиғәткә болашмағыҙ, йәмәғәт,
Һәммәһен дә аҫрауһы ул берҙән-бер.

* * *

Күлең ҡайҙа, тыуған илем?
Сабаҡ булайым кескәй.
Һыртың ҡайҙа, тыуған илем?
Уйнаҡлайым кейектәй.
Далаң ҡайҙа, тыуған илем?
Салҡан ятып уйлайым.
Бабам ҡайҙа, тыуған илем?
Һаҡалы менән уйнайым.
Сүлең ҡайҙа, тыуған илем?
Уны гиҙеп, сарсайым.
Һарғылт ҡола ҡомдарында
Ғүмер йөгөн тартайым.
Күгең ҡайҙа, тыуған илем?
Һауалайым, ҡалҡайым.
Елең ҡайҙа, тыуған илем?
Бер елпенеп алайым.
Тауың ҡайҙа, тыуған илем?
Табынайым, арҙаҡлап.
Дошманың бармы, тыуған илем!
Атылайым һаҙаҡтай.

## Ғүмер хаҡында

Был ғүмерҙе һорамасы һин минән,
Ғүмерҙе мин әле йүнләп күрмәгән.
Был ғүмерҙе белгең килһә, ҡартҡа бар —
Яу ҡырынан яңғыҙ улы килмәгән;
Тол килене бер бала ла тапмаған,
Етем ҡартты балаһылай бәпләгән.

Был ғүмерҙең ҡыры күп, мин белмәгән...
Уның хаҡта һорамасы һин минән.
Был ғүмерҙе белгең килһә, ҡартҡа бар —
Тормошонда золом күргән — үлмәгән,
Ялған ғәйеп тағылғанда күлдәнән*,
Хәҡиҡәттең ап-аҡ тыуын бирмәгән.

Шунан һора, шунан һора ғүмерҙе:
Ни кисерҙе, нимә белде, ни күрҙе?
Аҡыллы зат ахмаҡтан ник еңелде,
Анау илай, быға ниңә күңелле?
Шунан һора, шунан һора ғүмерҙе.

* Күлдәнән — көтмәгәндә.

* * *

Бына тағы асыу килеп алҡымыма тығылды,
Аҡылымдың ишегенән атлай биреп йығылды.
Күлдәй тоноҡ күңелемә бысраҡ ташлап, болғатып,
Бәғзе берәү йәнде үртәй — һынай минең сығырҙы.

Энем әйтһә, мин баш ҡаҡтым, ағам әйтһә, хуш күрҙем,
Ситкә ҡаҡмай, бар кешене яҡшы, тинем, дуҫ күрҙем.
Тоғролоҡ һәм хаяһыҙлыҡ тигән ике сифаттың
Араларын айырыуҙың ҡыйынлығын кисерҙем.

Ярай, гонаһ үҙемдәлер, үҙемә ғәйеп тағайым,
Аҡ йәнемә, саф йәнемә нахаҡ ҡором яғайым!
Тоғро булһаң, ҡулыңды бир, һинән фәһем алайым,
Түгел икән — яҡын килмә, һинән йыраҡ булайым.

Кемдер илай.
Ул, моғайын, үҙебеҙҙең ояттыр.
Ҡарашында — өнһөҙ һорау,
Борғоланмай, яуап бир:
Тормоштағы ололоҡто, тоғролоҡто йыйып ал,
Ҡалғандарын ат тояғы баҫмаҫ ергә олаҡтыр!

* * *

Уңай һүҙ бит “Ватанды һөйәм” тигән,
Ни ҡыйраттың “башымды эйәм” менән?
Уңай һүҙ бит, ҡорҙашым, уңай һүҙ бит
“Ватан өсөн үләмен, көйәм” тигән.

Үләм, тигән ирҙәрҙең хәбәреме?
Ҡуй, үлмәсе, буш һүҙҙең кәрәге ни?
...Әгәр Ватан йәйрәгән урман булһа,
Япраҡ булып ярғанбыҙ тирәгенә.

Еләҫ бул һин Ватанға, иҫә алһаң,
Һандуғас бул, һайратһын алтын далаң.
Ҡылысы бул Ватандың ҡынында һин,
Батырҙарҙың ҡулында ялтылдаған.

Икһеҙ-сикһеҙ, ҡырыйһыҙ оло дала,
Көн сыуағы һибелмәй, йылынамы?
Һөй Ватанды!
Эскерһеҙ, ихлас һөй ҙә,
Гөл булып ҡаҙал иңенә, буйына ла.

Йөҙ тулғанып, көнөнә мең уйлаһам,
Әсәм менән серләшеп, алам илһам.
Нисек уны һөйәм, тип әйтә аламын,
Бергә көлөп, ҡыуанып, моңаймаһам?!

...Уңай һүҙ бит “Ватанды һөйәм” тигән,
Эшең бөтмәй “янам” да “көйәм” менән...
Үгәй ата түгел дә Ватан тигән,
Ватанды мин Атамдай ғәзиз күрәм.

## Туғайҙа

Туғай ине Ҡараһыуҙың аръяғы,
Ҡайҙа булған ҡамыштары, талдары?
Нимә ҡарап йөрөй икән кешеләр?
Ҡайҙа булған илдең ғәййәр улдары?

Ҡайһы туң баш киҫеп бөткән таллыҡты?
Шәрә туғай хәтерләтә ҡомлоҡто.
Ниндәй ҡырғын төшкән һуң был тирәгә?!
Һис бер һуғыш булғаны юҡ был яҡта.

Туғай туҙған, гүйә, ҡаты сирләгән,
(Ата-баба ергә һаҡһыҙ теймәгән!)
...Ишәк менеп китеп бара аҡһаҡал,
Ҡырҡып алып, ҡырсын талды һөйрәгән.

Лайыҡмы шул һаҡалыңа, сәсеңә?
Әй, аҡһаҡал,
Ни көн килде башыңа?!
Туғайҙарың тоҡомондай тунала,
Тыуған ерҙе ҡурсалауың ошомо?

Һиңә төбәп әйтәм, ҡартлас, нәҡ һиңә!
Ҡолаҡ һалсы аҡылыңа, ҡәлбеңә.
Йәйен — йәйләү, ҡышын — ҡышлау ине бит
Ошо туғай малың менән үҙеңә.

Ҡара анау ағасы юҡ ҡаҡ тауға:
Гүйә, унда уғры төшкән бостанға.
Һирәп ҡалған урман шаулай елдәргә,
Ҡарғыш әйтеп айбалталы дошманға.

Тау-урманда,
Бынау кескәй туғайҙа
Йәнлек үрсей ине, хәҙер ул ҡайҙа?
Өмөт өҙөп, өрккән кейек, биҙгән ҡош,
Инде улар бында ҡайтып ураймы?
Тормош һүнгән яҡта йәшәү уңаймы?

Һиңә әйтәм: ҡыуаҡлыҡтар ҡыйралған,
Сыбыҡ, талың, шыршыларың урланған.
Һеҙ иҫ йыйып, ҡасан дәғүә иткәнсе,
Ни ҡалыр һуң?..
Ни ҡалыр был урмандан?!

*Ҡаҙаҡсанан Мәүлит ЯМАЛЕТДИН*
*тәржемәһе.*